Ғилем һәм ғәмәл

ЙӘШӘҮ КҮРКЕ - ЙӘР МЕНӘН

Гүзәл СИТДИҠОВА

Ярап торорға кәләш алмайҙар

Ғаилә ҡороусы егет түбәндәге бурыстарҙы үтәй тип һанала:

- ғаләм, Аллаһы Тәғәлә алдында - ергә яралтылған һәр йән эйәһе үҙ затын дауам итергә тырыша, был - кешелек затын һаҡлау бурысы;

- милләт, ҡанбабалар алдында - улар тоҡомон дауам итеү бурысы;

- үҙе алдында - нәҫелен ҡалдырыу, тәбиғи теләктәрен ҡәнәғәтләндергәндә яман сир-сорға юлығыуҙан һаҡланып, сәләмәт тоҡом ҡалдырыу бурысы;

- ҡатыны алдында - үҙ нәҫелен дауам итергә тейешле кеше булараҡ, уға ҡарата динебеҙ һәм донъяуи ҡанундар ҡушҡанды үтәү бурысы;

- балаһы алдында - һәр яҡлап ҡурсыуға алып, уны лайыҡлы шәхес итеп үҫтереү бурысы;

- Ғаилә-никах мәсьәләләрендә йола, ғәҙәт ҡанундары түбәндәге мәҡәлдәрҙә һаҡланып ҡалған һәм яҡынса ошондай шарттарҙы үҙ эсенә ала:

1. Кәләш яҡындан булырға тейеш түгел:

Алыҫтан ат алма, яҡындан ҡыҙ алма.

Ат һәм ҡыҙ образы юҡҡа ғына параллель итеп бирелмәй - ат яңы хужаларға эйәләшә алмай ҡайтып китеүсән, алыҫтан алһаң, артынан йөрөй-йөрөй хәлең ҡалмаҫ. Йәш килен дә, ата-әсәһе яҡын булғас, һағынһа ла, берәй нәмәгә үпкәләһә лә, тыуған йорто яғына ҡарап ҡына тороусан. Юҡҡа-барға көйһөҙләнеп, ҡайта һалып бармаһын, артыҡ-бортоҡ һүҙ ташылмаһын өсөн дә ҡыҙҙың алыҫтаныраҡ булыуы ғаиләнең тотороҡлоғона йоғонто яһаған, әлбиттә.

Алыҫтан ҡыҙ алһаң, ҡосаҡ-ҡосаҡ бүләк килер, яҡындан ҡыҙ алһаң, ҡосаҡ-ҡосаҡ ғәйбәт килер.

Был мәҡәлдәрҙән күренеүенсә, алыҫтан ҡыҙ алыу бер нисә маҡсатҡа ярашлы: йәш ғаиләгә туған-тыумаса артыҡ йоғонто яһай алмаһын, килен иренең туғандары араһында күнеп йәшәп китһен, ҡоҙалар араһында йәмһеҙләнешеү булмаһын. Йәнә бер мөһим сәбәп - нәҫелдән килгән ауырыуҙарҙы иҫкәртеү булған. Тап шул маҡсатта хатта бер ауылдан килен төшөргән осраҡта ла ете быуын алышыныуы шарт итеп ҡуйылған: Ҡыҙ бауыры ете быуындан алмашына, тигән халыҡ мәғәле лә ошо хаҡта. Әйткәндәй, башҡа бик күп төрки халыҡтарҙа экзогамия тип аталған был күренеш улай уҡ киң таралмаған. Мәҫәлән, төрөктәр, әзербайжандар, үзбәктәр араһында хатта ике туғандарҙы өйләндереүҙе ҡулайыраҡ та һанағандар - мөлкәт ситкә китмәй.

Шулай уҡ ил ағаларының халыҡтың киләсәген хәстәрләүе лә сағылалыр был йолала - халҡыбыҙ төрлө сығышлы ырыуҙарҙан да ойошҡан - бына уларҙы бер ҡан, бер милләт итеү маҡсатынан сығып та ярайһы ҡәтғи тотолғандыр был йола.

2. Мөмкин тиклем иртә өйләндереү мәғҡул һаналып, хатта сәңгелдәктән үк ҡолаҡ тешләтеп, йәрәшеү, "Һырға туйы" үткәреү йолаһы йәшәп килгән. Ишәк туйы - иллелә, тип ғаилә ҡорорға ашыҡмаған егеттәрҙән көлгәндәр, иҫәрерәк һанағандар. Өйләнмәгәндән аҡыл һорама тигәндәре лә бындайҙарҙы алйот һанағанға дәлил. Иртә өйләнгән үкенмәҫ.

Ҡыҙ баланы иһә тағы ла тиҙерәк эйәһенә тапшырыу хәстәрен күргәндәр, инйәр-ҡатайҙарҙа көйәнтәләгәндә биҙрәһе ергә теймәҫлек булһа, ҡыҙҙы кейәүгә бирергә мөмкин тигәнде ишетергә тура килгәне бар. Ултырып ҡалыуынан ҡурҡып, ғәҙәттә 16-17 йәштә, ә ҡайһы бер осраҡтарҙа хатта иртәрәк тә ҡыҙҙарын һоратҡан ергә биреп ебәреүҙе хуп күргәндәр, йот йылдары ғаиләләге артыҡ тамаҡтан ҡотолорға тырышыу ҙа күҙәтелгән. 18 йәштәрҙә ҡыҙ бала кейәүгә сыҡмағандар рәтенә инә лә башлаған. Ә ултырған ҡыҙға ен эйәләй.

Беҙҙең яҡтағы бер ауылда ҡартайғанса тигеҙ ғүмер итеп, балалар-ейәндәр үҫтереп, тормош төмен белеп, татыу йәшәгән әбей менән бабайҙы аңын-тоңон белмәҫ, танауҙарына еҫ кермәҫ элек үк никахлағандар ҙа, улар шул ваҡыттарын кеткелдәп көлә-көлә иҫкә алыр булғандыр. Ауыр замандар бит инде: икеһенә бер яҫтыҡ, бер иҫке юрған биреп, башҡа сығарғандар. Йылы тормаған өйҙә кис һайын шул юрғанға талашып, һуғышып ятып йоҡлай торғайныҡ, тип хәтерләр булған ҡарттар.

Донъя көтә белеүенән ҡыҙҙың йәш булыуы мөһимерәк һаналыуы түбәндәге әйтемдән асыҡ күренә:

Менгән атың - аҡбуҙ, һөйгән йәрең - йәш ҡыҙ.

Ир кешенең физик сәләмәтлеге (ә енси ҡеүәт бының төп күрһәткесе тип күрелгән) ҡул көсө ҙур әһәмиәткә эйә булған дәүерҙә юғары баһаланған һәм көс-ҡеүәт һаҡланһын өсөн түшәк яңыртыу файҙалы тип иҫәпләнгән (бер нисә ҡатынға өйләнеү күренешенең бер сәбәбе).

Йәш ҡыҙ алыу йәшәртә.

Йәш ҡайынға терәлеп ҡарт ҡайын ҡырҡ йыл йәшәгән.

Ултырып ҡалыу ҡыҙ бала өсөн оло фажиғәгә әүерелгәнлектән, артыҡ һайланыу өнәлмәй:

Ҡыҙың булһа ирҙә булһын, ирҙә булмаһа гүрҙә булһын.

Ҡарт ҡыҙ ир һайламаҫ, үлгән кеше ер һайламаҫ мәҡәле ҡарт ҡыҙ менән үлгән кешене хатта бер рәткә ҡуйып, ата-әсәне лә, уларҙың буй еткергән балаһын да ашығырға мәжбүр итә, ҡәтғи сикләй.

Ҡыҙҙы ирекһеҙләп кейәүгә биреү күренеше булһа ла шәриғәт, динебеҙ тарафынан был тыйылған, юҡҡамы ни, мулла никахҡа ризалыҡ тураһында һорауҙы иң беренсе ҡыҙға биргән. Әммә ата-әсә, күреүебеҙсә, ҡәтғи сиктәргә ҡуйылыу сәбәпле, йә балаһының етеш йәшәүен ҡайғыртып, йә башҡа сәбәптәр менән (әйтәйек, ҡоҙаларҙың социаль статусы ниндәйҙер өҫтөнлөктәр бирә) ҡыҙҙарын ризалыҡһыҙ кейәүгә биреүе фольклорҙа ла, әҙәбиәттә лә һынланыш тапҡан.

Шәриғәт буйынса 10 йәштәрҙән үк, икенсел енси билдәләр күренә башлау менән, кеше бәлиғ була тип һаналыу сәбәпле, ҡыҙҙарға хатта шул мәленән үк никахҡа инеү мөмкинлеге бирелгән. Хәҙерге медицина күҙлегенән был бик иртә, ҡыҙ бала ла, ир бала ла ғаилә көтөүгә әҙерлекһеҙ, организмдары ныҡынып өлгөрмәй тип иҫбатлана. Әммә егерменсе быуат урталарына тиклем кешенең үтә ҡыҫҡа ғүмерле булыуын иҫәпкә алһаң, зат-ырыуынды дауам итеү өсөн иртәрәк өйләнеү фарызлығына инанаһың:

Иртә өйләнгән - улынан-ҡыҙынан кинәнгән.

3. Үрҙә әйтелгәндәрҙән үк күренеүенсә, туғанлашыр яҡтың нәҫел-нәсәбе ниндәй булыуына бик ҙур әһәмиәт бирелгән:

Алма ағасынан алыҫ төшмәй.

Атаһынан күргән - уҡ юнған, әсәһенән күргән - тун бескән. Уҫаҡта алма үҫмәй.

Атын алма, затын ал (бынынһы бәйлығына ҡарағанда яҡшы заттан булыуы мөһимерәк тигән ҡарашты сағылдыра).

Атайһыҙҙы кейәү итмә, инәйһеҙҙе килен итмә. алмағаста алма бешә, дегәнәктә - дегәнәк.

Кәләш һайлауға үтә лә яуаплы ҡарауҙары хатта мөмкин булған һәр кемдән ҡыҙ тураһында мәғлүмәт алырға тырышыуҙарынан, кәңәш-төңәшһеҙ эш итмәүҙәренән асыҡ күренә.

Ат алһаң - ауылың менән, ҡыҙ алһаң, ырыуың менән кәңәшләш.

Ярап торорға өй һалма, ярап торорға бисә алма.

Дегәнәк араһында үҫкән сәскәнән һаҡлан. Был осраҡта ла күҙең төшкән ҡыҙҙың ниндәй ғаиләнән булыуын иҫтә тотоу кәрәклеге киҫәтелә. Үҙе сәскәләй булһа ла, нәҫел-нәсәбенең йүнһеҙ булыуы бәхетһеҙлеккә килтереүе ихтимал.

Күҙең менән һайлама, ҡолағың менән һайла.

Ҡыҙҙың хатта кем менән дуҫлашыуы ла иҫәпкә алынған:

Ҡыҙҙың кемлеге кемәйенән (әхирәтенән) билгеле.

4. Туғанлашыр яҡтың социаль статусы бер самараҡ булыуы яҡшы:

Ҡаҙ менән ҡаҙ, өйрәк менән өйрәк. Тибешеп ятһа ла тиңең булһын. Юрғаһына күрә дуғаһы. Буйың етмәгәнгә үрелмә.

Йәнә бер үҙенсәлеккә иғтибар итәйек - Ҡыҙыңды үҙеңдән түбәнерәккә бир, киленде үҙеңдән юғарыраҡтан ал. был мәҡәлә ҡыҙ баланың егеттән түбәнерәк баҫҡыста тороуы төҫмөрләнә. Ул үҙен ире менән тиң итеп тойһон өсөн социаль статусы түбәнерәк ғаиләгә төшөүе ҡулайыраҡ булған. Икенсенән, кейәү яғы үҙенән абруйлыраҡ кешеләр менән туғанлашып, йәмғиәттә тотҡан баҫҡыстан күтәрелеүҙе лә ҡайғыртҡан.

Әммә был барыбер ҙә егеттең шәхси сифаттарына талапты кәметмәгән, сөнки Ынйының эт муйынында ҡәҙере юҡ, йәғни насар ир ҡулында яҡшы ҡатындың ҡәҙере юҡ.

Ҡыҙ яғы ғаиләһенең юғарыраҡ баҫҡыста тороуына өҫтөнлөк бирелһә лә матди хәлдә артыҡ айырма булмауы хәйерле:

Бай менән ҡоҙа булһаң, наҙланып маҙаңды алыр, ярлы менән ҡоҙа булһаң, теләнеп маҙаңды алыр.

Бында, тәү ҡарамаҡҡа, ниндәйҙер ҡапма-ҡаршылыҡ бар кеүек. Ләкин, тарихтан белеүебеҙсә, кешенең йәмғиәттә яулаған дәрәжәһе һәр саҡта ла уның матди хәленә ярашлы булмаған. Әйтәйек, сауҙагәрҙәр алған табыштарына ҡарап гильдияларға бүленгән. Комедияларҙа йыш ҡына тап бына улар ҡатламының хәйерселеккә төшкән дворяндар менән туғанлашырға тырышыуы һүрәтләнә. Күпселектә ауыл ерендә йәшәгән башҡорт халҡында социаль традиция улай уҡ киҫкен булмаһа ла, руханиҙар, сауҙагәрҙәр, мөғәллимдәр, төрлө кәсеп менән шөғөлләнеүселәр, алпауыттар һ.б. йәмғиәттә төрлө социаль баҫҡыста торған. Аҡһөйәктәр һәм ҡара халыҡ төшөнсәһе, йәғни синфи бүленеш, әле ҡайһы бер ғалимдар инҡар итеп маташаһа ла, башҡорт халҡы өсөн дә ят булмаған. Үҙенән күпкә юғарыраҡҡа ынтылыу, маҡсатына өлгәшкән хәлдә, ярлы балаһы өсөн дә әллә ни отошло түгел:

Ҡалаҡ тотһа, хан ҡыҙының ҡулы ҡабара.

"Йәшлек" гәзитендә баҫылған, көләмәскә әүерелгән бер ҡыҙыҡ хәлде тулыһынса килтерәм (2002 йыл, 12 февраль). Уны Әбйәлил районының Атауҙы ауылынан Рәшит Ямалетдинов тигән ағай яҙып ебәргән. Әммә шуға оҡшаш хәлдәр тураһында электән һәр яҡта үҙенсәләтеп ниндәйҙер ҡыҙыҡтар һөйләйҙәр.

"Башҡорттар элек өйләндереүҙе йәштәрҙән һорап та тормаған. Хәҙер генә егет менән ҡыҙ осрашып танышып, бер-береһе менән вәғәҙәләшкәс, әллә күпме мәшәҡәттәр тыуҙырып, аҡса туҙҙырып, туй үткәрәләр ҙә, күп тә үтмәй, холҡобоҙ тура килмәне, тип айырылышып та ҡуялар.

Беҙҙең ауылда матур итеп бик күп бала үҫтереп, бүтәндәргә өлгө булып 60 йылдан ашыуыраҡ бергә йәшәгән оло ғаилә бар ине, хәҙер мәрхүмдәр инде, ожмахтың түрендә булһын рухтары уларҙың. "Оҙаҡ һәм татыу йәшәүебеҙҙең сере ул, уландар, мин инәйегеҙҙе ыштанһыҙ көйөнсө барып алыуҙа", - тип һөйләр ине олатай.

Ә хәл былай булған. Иртәгә килен әйттерергә китәйек тип әҙерләнеп йөрөгәндә, кискеһен егеттең кейеп йөрөгән киндер ыштанын систереп йыуып ҡуйғандар, алмашы булмағас, икенсене киймәгән, ә оҙон күлдәк итәге менән оят ерҙәрен ҡаплап торған.

Иртәгеһен ашығып сығып киткәндә егеттең ыштанһыҙ икәнен һиҙеүсе булмаған тик 30-40 саҡрым ер үтеп, ат ашатырға, тамаҡ ялғарға туҡтағас ҡына ыштан онотолоп ҡалғанын белгәндәр (Егет тигәнең дә ыштан кейеп йөрөргә әле бик ғәҙәтләнеп тә өлгөрмәгән малай булғандыр инде. - Авт.). Нишләһендәр инде, кире боролоп тормағандар, барып килен әйттереп, никахын уҡытып, уларҙы ҡушып ҡайтҡандар.

"Өйләнгәндә ыштан булмаһа ла ярай ул, уландар, әгәр үҙең ихлас булһаң", - тиер ине олатай, шаяртып".

5. Ҡаҙ менән ҡаҙ, өйрәк менән өйрәк мәҡәле шулай уҡ өйләнеүселәрҙең бер милләттән, динДән булыуы ҡулайыраҡ тигән фекерҙе сағылдыра:

Һөмһөҙ һыйыр үҙ көтөүен танымаҫ.

Ҡамышты үҙ күлеңдән ал, кәләште үҙ илеңдән (йәғни үҙ динеңдән, милләтеңдән) ал.

Дәһрилек осоронда дингә бәйле мәҡәлдәрҙең фәҡәт ашлауға ҡоролғандары ғына яҙып алыныу сәбәпле, беҙ был осраҡта тик шәриғәт ҡанундарын ғына күҙҙә тота алабыҙ. Хатта диндәш, бер үк тиерлек телле булыуға ҡарамаҫтан, татарҙар менән никахлашыу XIX быуат ахырында ла һирәк осраған. Килмешәктәргә ер башҡа урындан бирелгән, һис юғы ауыл ситендә урынлашып, улар рәүешле йәшәгәндәр.

6. Борон кем менән туғанлашыу мәсьәләһен ололар ғына хәл иткән тигән фекер ныҡынған, әммә әйтәм-мәҡәлдәр хис-ғишыҡ шулай уҡ иҫәпкә алынғанын асыҡ күрһәтә:

Көсләп аҫҡан күҙҙең нуры юҡ.

Мөхәббәт өсөн йән фиҙа.

Һөйгән йәр - һөйәгең елеге.

Мөхәббәт тамуҡ утынан ете өләш артыҡ булыр, ти. Мөхәббәт таш ярҙырта.

Ике күңел бер булһа, сүплек башы гөл булыр.

Әммә артыҡ тойғоға биреләү ҙә өнәлмәй, бының хатаға килтереү ихтималлығы киҫәтелә:

Ғишыҡ кешене диуана итә.

Ғишыҡ тотҡан - күҙһеҙ.

Мөхәббәт тешкә ҡарамай, эшкә ҡарай (матурлыҡҡа ҡыҙма, уңғанды эҙлә мәғәнәһендә).

Алма үҙең һөйгәнде - алданырһың, ал үҙеңде һөйгәнде - ҡыуанырһың.

Ныҡ һөйә тип һөйөнмә, уртаса һөйә тип көйөнмә, сөнки үтә ҡыҙыл тиҙ уңа.

Тимәк, йәштәр бөтөнләй үк бер-береһен белмәй-күрмәй өйләнешмәгән. Егет менән ҡыҙ йәшертен генә осраша ла алған, тик ҡайҙа ти ул хәҙерге һымаҡ кеше алдында ҡосаҡлашыу, үбешеү: кешегә хисеңде белдереү - ҙур әҙәпһеҙлек: Йөрәк серең йөрәктә ҡалһын.

Осрашыуға йәштәр ябай ғына булһа ла бүләктәр менән килеп, бер-береһенең күңелен үҫтерер, вәғәҙәләшеү билдәләре тапшырар булған. Иң йыш бирелгән йәдкәр - ҡыҙ үҙ ҡулы менән сиккән, һөйгәненең исеме нағышланған ҡульяулыҡ. Егет исемләп йөҙөк-балдаҡтар кейҙергән, шуғалыр ҙа таҡмаҡтарҙың күбеһе Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң исемдәре фәләнкәй рәүешле башлана. Хат бирешеү, уҡый-яҙа серлелек йәштәрҙе тағы ла нығыраҡ тартылдыра, уйтойғоларҙың йәшертен булыуы мөхәббәттәрен көсәйтә. Тыйылғанлыҡ шарттарында ғына Ләйлә-Мәжнүн ғишҡы тыуыуы мөмкиндер ул.

Көслө зат осрашыуға хушбуй, еҫле май, еҫле һабын, яулыҡ кеүек бүләктәр тотоп килһә, ҡыҙҙар ҡул эшенә, аш-һыуға оҫталығын да күрһәтергә яйын таба: фольклорҙа исемле ҡульяулыҡтан тыш мамыҡ бирсәткә, шарф, бауырһаҡ һ.б. телгә алына. Тағы көләмәс иҫкә төшә.

Бер сибәркәй тырышып-тырышып бауырһаҡ бешергән дә, егетенә төйөнсөк әҙерләп, өй сарлағына йыйып ҡуйған, ти. Ҡәһәр һуҡмағыры, был эште ҡустылары һиҙеп ҡала бит: менеп ашайҙар ҙа, урынына кәзә-һарыҡ "йомор-саҡтарын" төйнәп ҡуялар.

Аңын-тоңон һиҙмәгән меҫкен ҡыҙ осрашыуҙа, билдәле, уңайһыҙ хәлгә ҡала. Унда ла әлеге етешһеҙ тормош, Аптырашынан:

- Өс күкәйем, күбек майым әрәм булды, Хоҙайым, - тип уфтанды, ти. Оялсанлыҡ ҡыҙ балаға һөйкөмлөлөк өҫтәһә лә, егет кеше өсөн артыҡ яҡшы сифат иҫәпләнмәй:

Оялсан егет йәрһеҙ ҡалыр.

Ҡош аяғынан, ҡыҙ иреренән әләгер мәҡәле инде - эротик тәрбиә миҫалы. Ул ир затын нисек маҡсатҡа өлгәшергә өйрәтһә. ҡыҙҙы киҫәтә, ә Ирең булмаҫтайға иреренде бирмә тигән мәҡәл тәүгеһен тағы көсәйтә төшә.

Ҡыҙҙы ҡаратыу ысулын да өйрәтә мәҡәлдәр. Ҡошто ем менән алдайҙар (йәғни бүләккә йомарт булырға кәрәк). Ҡошона күрә тоҙағы, йәки, Аҫҡыҫ ярамаҫ йоҙаҡ юҡ тигән мәҡәлдәр иһә егет кешенән психолог булыуҙы, телгә маһирлыҡты ла талап итә. Тик, тағы бер көләмәстән күренеүенсә, мөхәббәт ҡайһы саҡ матур һүҙҙәр менән әүрәтеүгә лә ҡарамай икән. Ауылда бик кирегә бөткән егет булған. Бына ул да өйләнер йәшкә еткән, бер гүзәлкәйгә күҙе төшөп, яр буйына осрашыуға саҡырған, ти. Ҡыҙ наҙлыҡай ғына Таһир-Зөһрәләр, Ләйлә-Мәжнүндәр тураһында дастандар ғына уҡып үҫкән, егеттән бөҙрә-бөҙрә ғишыҡ һүҙҙәре көтә икән дә, тегеһе хатта ябайҙарын да әйтә белмәй һерәйеп баҫып тора, сөнки гел әйтелгәндең киреһен генә ҡабатлап өйрәнгән. Шунан һылыуҡай түҙмәгән, күккә ҡарап:

- Күктә йондоҙҙар йымылда-а-ай, - тип әйтеп ҡуйған булған.

Быныһы шуны ғына көтөп торғандай, яуаплай һалған:

- Йымылдаһа ни!

Ғәжәпләнгән сибәркәй ахыры һүҙҙе икенсегә бора:

- Йылға ҡайһылай матур аға.

- Аҡһа ни!

Тамам аптырашҡа төшкән ҡыҙ, артабан ни тиергә лә белмәй торғас, тура ярып һорау бирә:

- Ниңә саҡырҙың һуң, яратмайһыңмы ни?

- Яратһа ни, - тип яуапланы, ти, теге арҡыры, һөйгәненең битенән үбеп. Күп тә үтмәй гөрләтеп туй яһап та ташланылар, ти, былар.

7. Артыҡ ныҡ һайланыу, талапты сикһеҙ ҙурҙан ҡуйыу яҡшыға килтермәй: Күп һайланған ҡалыр. Ғәйепһеҙ йәр эҙләгән йәрһеҙ ҡалыр. Хан ҡыҙының битендә лә бармаҡ битендәй миң булыр.

8. Туй, килен төшөрөү миҙгелдәре шулай уҡ билдәле бер тәртипкә буйһонған. Йышыраҡ никах - яҙға, туй көҙгә тәғәйенләнә торған булған: Яҡшы килен яҙ килер, яман килен көҙ килер. Килен эш көсө һаналған һәм йәйге эштәр бөтөп, уңыш йыйғас әҙергә килеүҙе оҡшатмайҙар. Ә бына Байҙың туйы яҙ булыр. Ҡалым малын түләп бөтмәй тороп егеттең кейәүләп йөрөү күренеше лә киң таралған. Әммә:

Көйһөҙ кейәү кейәүләп ятҡансы, көйлө кейәү кәләшен алып ҡайтҡан.

9. Ҡыҙ яусы аша әйттерелгән, һис юғы һоратырға ошо эштә тәжрибәһе булған оло йәштәге абруйлы ғаилә ағзаһын ебәргәндәр. Быға тиклем алдан димсе барып, ата-әсәнең ҡылын тартҡылаған, әлбиттә. Яусының буш ҡайтыуы егеткә дан өҫтәмәй бит: Егетлегенде белгең килһә ҡыҙға яусы ебәр, тип бушҡа әйтмәгәндәр. Шуға ла ауылдарҙа димселек-яусылыҡ менән шөғөлләнгән махсус кешене был изге эшкә ҡушыуҙы ҡулайыраҡ күргәндәр:

Һөйләй белмәҫтең һүҙе - үтмәҫ бысаҡтың үҙе.

Яусы булмаһаң дим һөйләмә.

Димсе диңгеҙ кисерер, илтеп ярҙан осорор.

Яусы менән аусы ялғанһыҙ булмаҫ.

Арбауын белһәң, ҡара йылан да ҡарышмай.

Яусының иһә тел оҫталығы өҫтөнә әҙер ҡалыптары, кинәйәләп әйтеү алымдары булған: тәҡдим кире ҡағылған осраҡта ла әйтелгәнгә икенсе мәғәнә бирепебәрергә мөмкин, изге ниәтте еншайтан ҡолағынан, күҙ тейҙереүҙән һаҡлау ҙа зарур. Миҫалға: Һиндә лә бар аҡлы ҡуй, миндә лә бар аҡлы ҡуй, ҡуйҙы ҡуйға ҡушайыҡ, һеҙҙең яҡҡа ашайыҡ (йәғни, ҡүсәйек).